*Раuил БИКҠАЕВ*

# Тарих киләсәккә саҡыра




Ошо көндәрҙә мин күренекле фольклорсы, филология фәндәре докторы Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина әҙерләп сығарған бик бай йөкмәткеле китап менән таныштым[1]. Ғалимәнең быға тиклем яҙылған хеҙмәттәрен даими уҡып барам. Күптәре шәхси китапханамда хөрмәтле урын алған. Уларҙы бәйнә-бәйнә байҡарға теләһәм дә, был мәҡәләлә ундай мөмкинлек юҡ. Фәнүзә Нәҙершинаның ғилми хеҙмәттәре, милләтебеҙ ғорурлығы булған бик бай фольклорыбыҙҙың аҫыл өлгөләрен ентекләп туплап сығарған китаптары фән донъяһында һәр саҡ юғары баһалана.

Әле өҫтәлемдәге китап — “Башкирские исторические предания и легенды” — фундаменталь ғилми баҫма, ҡыуаныслы ваҡиға тип ауыҙ тултырып әйтә алам. Бында халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадынан 600-гә яҡын әҫәр ингән, улар йөкмәтке һәм тема буйынса төркөмләнгән. Ундан артыҡ бүлектең һәр береһендә сығанаҡтар аталған һәм комментарийҙар бирелгән. Был ҙур күләмле том төҙөүсенең “Халыҡ һөйләгән тарих” (“История, рассказанная народом”) тигән инеш мәҡәләһе менән асыла, аҙағында этностар һәм ырыуҙар, тарихи шәхестәр, информаторҙар, йыйыусылар исемлеге һ.б. хаҡында унлап бүлектән торған фәнни белешмә бирелә. Китапты башлап ебәргән мәҡәләне тикшеренеүсенең элекке эҙләнеүҙәрен һәм күҙәтеүҙәрен дауам итеүсе, артабан үҫтереүсе үҙе бер ғилми хеҙмәт тип әйтергә мөмкин. Ғөмүмән, был китап бөгөнгө фәнни баҫмаларға ҡуйылған иң юғары талаптар кимәлендә төҙөлгән. Полиграфик яҡтан сифатлы булыуы менән дә ул иғтибарҙы тартып, ҡыуандырып тора.

Бер хәл тураһында айырым әйтеп үткем килә: Фәнүзә Нәҙершинаның китаптарын уҡып, бындай шатлыҡты минең быға тиклем дә күп кисергәнем булды. Беҙ Фәнүзә Айытбай ҡыҙы менән замандаштар ғына түгел, оҙаҡ йылдар хеҙмәттәштәр ҙә булдыҡ. Башҡорт дәүләт университетында уҡып сыҡҡандан һуң мин аспирантура бөтөрөп, 1965 йылда ул ваҡытта СССР

Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалына ҡараған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй башланым. Бында утыҙ йыл буйына ғилми тикшеренеүҙәр менән шөғөлләнгәндән һуң, йәғни 1995 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе итеп һайланғас та, институт менән бәйләнешем өҙөлмәне. Нәҡ ошо осорҙа — алтмышынсы йылдарҙа Фәнүзә Нәҙершина ла бында эшкә тотонғайны. Хатта ғилми ойошманың бер үк тармағында — етәксеһе академик Ғайса Хөсәйенов (ул ваҡытта филология фәндәре кандидаты) мөдир булған әҙәбиәт һәм фольклор секторында бергә хеҙмәт иттек, әллә күпме яңы хеҙмәттәрҙең ҡулъяҙмалары тураһында фекер алышыуҙарҙа бергә ҡатнаштыҡ. Фәнүзә Нәҙершинаның кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған саҡтары ла, тәүге китаптарының донъя күреүе лә әлегеләй күҙ алдымда[2].

Беҙ эш башлаған осор Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында фәнни тикшеренеүҙәрҙең өр-яңы бейеклеккә күтәрелгән шанлы дәүере ине. Беҙ фән юлына аяҡ баҫҡанда Әхнәф Харисов, Ғайса Хөсәйенов, Ғилемдар Рамазанов, Ҡим Әхмәтйәнов, Суфиян Сафуанов, Әнүр Вәхитов, Нур Зарипов, Мөхтәр Сәғитов, Ниғмәт Шоңҡаров һымаҡ талантлы шәхестәр менән хеҙмәттәштәр булдыҡ. Аҙаҡ әҙәбиәтселәр һәм фольклорсылар үҙ аллы сектор — бүлектәргә айырылғас та, уртаҡ күтәренке рух менән илһамланып йәшәү, әле өйрәнелмәгән ҡатламдарға үтеп ингән бик мөһим тикшеренеүҙәр, ҙур эштәр дауам итте. Айырым ғалимдарҙың уңышлы монографиялары донъя күрҙе. Әле мин уҙған быуаттың 70—90-сы йылдарында баҫылып сыҡҡан һәм тотош ил күләмендә оло ваҡиғаға әйләнгән ике хеҙмәтте — “Башҡорт халыҡ ижады”ның үҙенсәлекле китапханаһын, “Башҡорт әҙәбиәте”нең күп томлыҡ тарихын атар инем[3].

Ғалимдарҙың башҡорт халыҡ ижадының шундай ғилми тупланмаһын әҙерләп сығарыуы бик юғары баһаланды: был хеҙмәт өсөн Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булған лауреаттар араһында Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина ла бар. Ысынлап та, ун һигеҙ томлыҡ был тупланманы ентекләп әҙерләп донъяға сығарыуҙа башҡа күренекле ғалимдарҙың тырышлығы менән бергә Фәнүзә Нәҙершинаның хеҙмәте лә ҙур булды. Был китапхананың өс томын, шул иҫәптән, риүәйәттәр, легендалар хаҡындағы томды, ул төҙөнө, бай материалға нигеҙләнгән инеш мәҡәләнең, бында ингән 323 әҫәргә ентекле аңлатмаларҙы, рус телендә мотивтар күрһәтмәһен (“Указатель мотивов”) яҙҙы[4].

Фольклористикалағы һәр ғилми эш үҙенә тиклем тупланған күп һанлы мәғлүмәттәргә һәм хеҙмәттәргә нигеҙләнеп яҙыла, уларға ғалимдың төрлө сәфәрҙәр, осрашыуҙар ваҡытында йыйған ҡомартҡылары ла өҫтәлә. Мәҫәлән, “Башкирские исторические предания и легенды” тигән китапҡа ингән алтмышлап сюжетты Фәнүзә Нәҙершина төрлө йылдарҙа, төрлө юлдар үткәндә, төрлө кешеләрҙән үҙе яҙып алған, был мәғлүмәттәр уның шәхси архивында тупланған.

Ғилми сәфәрҙәрҙә йөрөү, бик күп кешеләр менән даими аралашыу һәм улар араһынан үҙенә кәрәк мәғлүмәттәрҙе таба белеү, шуларҙы ғүмерең буйына берәмтекләп йыйыу — халыҡ ижадын өйрәнеүсенең йәшәү

рәүешен, ғилми эҙләнеүҙәренең һөҙөмтәләрен шуларҙан башҡа күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Был ҡатмарлы, тынғыһыҙ хеҙмәтте маҡсат итеп һайлаған кешенең яҙмышы бына шулай. Фәнүзә Нәҙершина ундай юлдарҙы күп үткән ғалимә. Уның сәфәрҙәре Башҡортостан менән генә сикләнмәй, республиканан ситтәге башҡорттар араһына ла барып еткән. Әле Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эш башлаған сағында уҡ йәш ғалимә 1960 йылдың йәйендә күренекле башҡорт әҙибе һәм фольклорсыһы Ҡирәй Мәргән етәкселегендәге фәнни экспедицияла ҡатнашҡан, Ырымбур өлкәһенең Туҡсоран төйәгендә минең яҡташтарымдан ауыҙ-тел ижады өлгөләрен яҙып алған. Беҙҙең яҡтарҙа эпик ҡомартҡылар ныҡ һаҡланғайны. Туҡсорандағы башҡорт ауылдарында йөрөгәндә ғалимдар шуларҙы белеүселәргә йыш юлыҡҡан һәм байтаҡ үрнәктәрҙе яҙып алып өлгөргән. Шуға ла "Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. 1-се китап"[5] тигән томдың аңлатмалар өлөшөндә мин байтаҡ сәсән яҡташтарымдың исем-шәрифтәрен уҡып ҡыуанғайным. Ул мәғлүмәттәрҙе мин әле лә ҡыҙыҡһынып уҡып-уҡып алам. "Аңлатмалар" өлөшөндәге 314-се биттә "Аҡһаҡ ҡола" эпосына бәйле ошолар яҙылған: "7-се вариант. Ырымбур өлкәһе Переволоцкий районы Ғәбдрәфиҡ ауылында 62 йәшлек Нәзифә Байтимерованан 1960 йылда Ф.А.Нәҙершина менән С.Ә.Галин яҙып алған".

Бәй, был бит беҙ сабый сағыбыҙҙа күп тапҡырҙар йотлоғоп тыңлаған ауылдашыбыҙ! Ғәбдрәфиҡ — әсәйемдең тыуған, минең үҫкән ауылым. 1945 йылда атайым вафат булғас, әсәйем яғынан Латип ҡартатайым беҙҙең йортобоҙҙо тыуған ауылыбыҙ Ҡунаҡбайҙан үҙенең янына — Ғәбдрәфиҡҡа ағай-эне көсө менән күсереп һалғайны. Бында дөм һуҡыр сәсән өбей Байтимерова Нәзифә йәшәй торғайны. Уның күңеле тулы халыҡ ижады хазиналары булған икән. Беҙ уларҙы әкиәттәр тип бик күп тыңланыҡ, ҡайһыларын бер төндә һөйләп бөтөрә алмайынса, икенсе кисте дауам итер ине. Бына шулар булған инде беҙҙең бала сағыбыҙҙағы сериалдарыбыҙ! Улар шул тиклем донъяларҙы онотоп тыңларлыҡ булмаһа, Нәзифә өбейҙе тиҙерәк саҡырайыҡ, үҙебеҙҙә ҡундырайыҡ тип, әсәйҙәребеҙгә, беҙҙәгесә әйткәндә, инәйҙәребеҙгә ҡат-ҡат инәлер инекме ни?!

Тормош тигәндәрең ни тиклем ҡыҙыҡлы! Йылдар үтер ҙә, беҙҙең яҡтарҙа башҡорт фольклорсылары халыҡ менән осрашып йөрөп, бәләкәй сағыбыҙҙа беҙ тыңлап үҫкән Нәзифә Байтимерова менән минең киләсәктә хеҙмәттәшем, фекерҙәшем буласаҡ Фәнүзә Нәҙершина осрашып, унан "Аҡһаҡ ҡола"ны яҙып алыр, был мәғлүмәттәр бер заман ташҡа баҫылып сығыр ҙа, шулар тураһында мин хайран ҡалып уҡырмын тип кем уйлаған?!

Хайран ҡалырлыҡ ваҡиғалар алда тағы ла көткән икән әле. Фәнүзә Нәҙершина төҙөгән "Башҡорт халыҡ ижады"ның "Риүәйәттәр, легендалар" томында (130 бит) "Һаҡтау ауылы" тигән яҙма баҫылған, ул "Башкирские исторические предания и легенды" тигән китапҡа ла ингән (414 бит).

Был сюжет ошолай башлана: "Ҡасандыр бынан күп йылдар элек Туҡсоран буйындағы Ҡунаҡбай тигән ауылдың бер өйөр йылҡыһы юғала. Йылҡы өйөрө тауҙан-тауға тибенләп китеп, ошо яҡҡа — Урал артына килеп сыға. Йылҡы

өйөрөн икенсе йылы ошо яҡтағы бер тауҙа табалар. Йылҡылар кәмеү түгел, ҡолонлап, ишәйеп торған булған. Өйөрҙө табыусылар ҡайтып һөйләйҙәр. Ауыл ҡарттары был тауҙы: “Һаҡлы тау икән, бик хәйерле тау”, — тип килеп ҡарағандар. Урын оҡшаған. Ҡуңелдәренә ятышлы был тау битләсенә күсеп ултырғандар”.

Тимәк, хәҙерге Йылайыр районына ингән ерҙәргә минең ауылдаштарым да барып тамырланған. Халыҡ ижады бына шундай тарихтарҙы беҙгә килтереп еткерә. Бындай күсенеүҙәр элекке замандарҙа, бәлки, бик үк һирәк тә булмағандыр. Был ваҡиғаларҙың халыҡ хәтерендә һаҡланып, беҙҙең көндәргә килеп етеүе, юғалтмайынса ваҡытында яҙып алыныуы, аҫыл сериялағы китапта баҫылып сығыуы һәм шуны минең тулҡынланып уҡып ултырыуым ғәжәп. Ләкин тағы ла ғәжәпләнерлек ваҡиғалар алда көткән икән. 1990 йылдың йәйендә ҡәләмдәштәрем, юлдаштарым Мостай Кәрим, Ҡәҙим Аралбай, Хисмәт Юлдашев менән Бабич эҙҙәре буйлап Йылайыр яҡтарында йөрөгәндә ошо Һаҡтау ауылына ла юлығырбыҙ, халыҡ менән осрашҡандан һуң бындағы хөрмәтле уҡытыусы, халыҡ тарихын хәтерендә һаҡлаған Айнулла Ғәниев менән осрашырбыҙ, “Һаҡтау ауылы” тигән мәғлүмәттәрҙе яҙып алыусыға 1973 йылда үҙе һөйләгән кешенең йортонда булырбыҙ тип кем уйлаған?! “Һаҡтауҙың Соран буйындағы Ҡунаҡбайҙан күскәнен ҡарттарҙан тыңлап үҫтем”, — тигәйне Айнулла (Ғәйнулла) ағай. Улар Мәфтүхә еңгә менән 6 ҡыҙ, 5 ул тәрбиәләгәндәр. Балалары бесән әҙерләп ятҡан сабынлыҡтарында ла булғайныҡ. Бер юлы туғыҙ салғы һелтәйҙәр. Ошонда биш ҡурайҙа “Урал”ды яңғыратып ебәргәйнеләр, иң бәләкәй ҡыҙҙары Гүзәл дә уйнағайны. Шунда төшкән фоторәсем минең “Сәфәрҙәргә сығам сәхәрҙәрҙән” (2002) тигән китабымда баҫылды. Уҙғандағы тарих хәҙерге менән бына нисек килеп тоташа. Ғилми хеҙмәттәрҙе һәм баҫмаларҙы уҡығанда үҙ яҙмышыңа бәйле ошондай кисерештәр менән тулҡынланған саҡтар ҙа була.

Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш. Был бик хаҡлы һүҙҙәр һуңғы ваҡытта айырыуса йыш ҡабатлана. Ләкин һәр этностың ҡатмарлы үҫеш юлдарын тулыраҡ белер өсөн башҡа милләт ғалимдарының, сәйәхәтселәренең, әҙиптәренең һ.б. яҙып ҡалдырған мәғлүмәттәре лә бик әһәмиәтле. Боронғо башҡорт тарихын беҙ күберәк сит телдәрҙәге сығанаҡтар буйынса беләбеҙ. Бигерәк тә рус авторҙары Башҡортостан һәм башҡорттар тураһында бик бай мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған[6]. Хатта Салауат Юлаевтың шиғырҙары ла яҙма рәүештә тик рус теленә тәржемәләрҙә һаҡланып ҡалған бит[7].

Башҡорт халыҡ ижадын, бигерәк тә риүәйәттәр менән легендаларҙы өйрәнеү тарихы Фәнүзә Нәҙершина хеҙмәттәрендә төрлө яҡлап эҙмә-эҙлекле тикшерелгән. Байтаҡтан килгән был мөһим эш әле лә уңышлы дауам итә. 2015 йылда донъя күргән “Башкирские исторические предания и легенды” тигән тос хеҙмәт үҙе үк шул фекерҙе раҫлап тора.

Башҡорт халыҡ ижады — ошо өс һүҙ ни тиклем ҙур рухи хазинаны айырылғыһыҙ итеп берләштерә. Бик боронғо замандарҙан башҡорттоң бергә тупланып йәшәүе, туған телендә быуындан-быуынға күсерлек әҫәрҙәр ижад итеүе, уларҙың һаҡланыуы, ниндәй телдә донъяға тыуған булһа, шул телдә тотош китапхана булып баҫылыуы — былар беҙҙең рухи донъябыҙҙағы уни-

каль күренеш. Башҡорт халҡының кешелек цивилизацияһына индергән иң тос өлөшө, бәлки, "Урал батыр" һымаҡ эпостарыбыҙҙыр. Улар күптән инде юҡҡа сыҡҡан телдәрҙең (мәҫәлән, шумер теле) ҡомартҡылары менән бер дәүерҙә, хатта уларҙан күпкә алдараҡ ижад ителһәләр ҙә, төрлөсә һаҡланып ҡалған яҙмаларҙа ғына түгел, халҡыбыҙҙың йәнле телендә беҙҙең көндәргә килеп еткән. Былдай бәхет һирәк этностарҙың өлөшөнә тейә. Ләкин был хазинабыҙ һәм шатлығыбыҙ менән беҙ үҙебеҙ генә ғорурланып йәшәй алмайбыҙ, байлығыбыҙҙы башҡа халыҡтарға ла еткерергә тейешбеҙ. Быны иһә бары тәржемә аша ғына тормошҡа ашырып була.

Башҡорт халыҡ ижадының 18 томлыҡ тупланмаһы башҡорт телендә баҫылып бөтөү менән Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фольклорсыларының тағы ла бер грандиоз хеҙмәте — рус телендә 12 томда әҙерләнгән "Башкирское народное творчество" китаптары донъя күрә башланы[8]. Быға тиклем Мөхтәр Сәғитов менән Ғәзим Шафиҡов башҡорт фольклоры өлгөләрен рус теленә Өфөлә айырым китаптар итеп сығарыу буйынса ҙур эш башҡарҙы[9]. Был йүнәлештә тырышлыҡтар әле артабан дауам итә.

Ләкин хәҙерге заман үҙе үк беҙҙең алдыбыҙға тәржемә эштәренең тағы ла киңерәк ҡолас менән алып барылыуын — донъяға инглиз теле аша сығыу талабын ҡуя. Хәҙер башҡорт фольклоры әҫәрҙәрен бер китапта өс телдә — башҡортса, русса, инглизсә сығарыу яңы традицияға әйләнеп бара. Заман талаптарына лайыҡлы яуап бирерлек былдай өс телле китаптарҙы башҡорт фольклористикаһында Фәнүзә Нәҙершина башлап ебәрҙе һәм ҙур уңыштарға өлгәште[10].

Фәнүзә Нәҙершина төрлө халыҡ-ара фәнни симпозиумдарҙа йыш сығыш яһай. Уның үҙенең ғилми эшмәкәрлегенә арнап оло ғилми йыйын үткәреү — быныһы инде бик арҙаҡлы ғалимдарҙың ғына яҙмышында була торған ваҡиға.

Бай фольклорыбыҙҙа халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тормош тәжрибәһе, донъяға ҡараштары, тәрән фәлсәфәүи аҡылы тупланған. Ер йөҙөндә атаҡлы ҡорамдар һәм пирамидалар ғына түгел, Ирәмәлдәр ҙә, Торатауҙар ҙа бар. Әҙәм балаһы "Илиада"ларҙы ғына түгел, "Урал батыр"ҙарҙы ла ижад иткән. Хаҡлы ғорурланырлыҡ рухи хазиналарыбыҙ аҙ түгел. Ләкин ғорурланып ҡына йәшәп булмай. Аҫыл мираҫ хәрәкәттә, хәҙерге менән тере бәйләнештә булғанда ғына уның ҡәҙере тағы ла нығыраҡ арта.

Һуңғы йылдарҙа мираҫҡа мөнәсәбәттә һәйбәт үҙгәрештәр ҡыуандыра. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсында йәш быуын йылдан-йыл күберәк ҡатнаша. Араларында ысын сәнғәт оҫталығына ирешкәндәре бар. Хәҙер атаҡлы эпосты тулыһынса яттан белеүсе балалар үҫте. Әҫәр халҡыбыҙға нығыраҡ әйләнеп ҡайта, тарихи хәтеребеҙҙе яңырта, мираҫты бөгөнгө менән нығыраҡ бәйләй. Әлбиттә, эпос башҡортса һөйләнергә, уны һөйләүсе әҫәрҙе оригиналда белергә тейеш. Ләкин уның русса, инглизсә, төрөксә һ.б. телдәрҙә яңғырауы конкурстарға йәм өҫтәй. Һуңғы йылдарҙа сәсәндәр ярыштары йышыраҡ үткәрелә башланы, сәсәндәр мәктәбе барлыҡҡа килмәксе.

"Башҡорт шәжәрәләре" тигән һүҙҙәр фән донъяһына беҙҙең мираҫҡа бәйле килеп инде һәм нығынды. Шул исемдәге ғилми тикшеренеүҙәр, төрлө

үрнәктәрҙе йыйған китаптар беҙҙең ерлектә барлыҡҡа килде. Һуңғы йылдарҙа шәжәрәләргә иғтибар айырыуса көсәйҙе. Тамырҙарҙы барлауға мәктәп балаларының нығыраҡ ылығыуы ҡыуандыра. Элек башҡорт үҙенең ете быуынын мотлаҡ белергә тейеш булһа, хәҙер уларҙы хатта егерме баҫҡысҡа еткереүселәр ҙә бар. Башҡорттар ғына түгел, республикалағы башҡа милләт кешеләре лә үҙҙәренең генеалогияһын — ырыу ағасын тергеҙергә тырыша. Милләттәштәребеҙ araһында "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамдары йылдан-йыл йышыраҡ уҙғарыла. Бындай осрашыуҙарҙа төрлө ырыуҙарҙың шәжәрәләренән күргәҙмәләр ойоштороla, ауылдарҙың тарихына, ер-һыу атамаларына иғтибар арта, кешеләрҙең рухи бәйләнештәре, яҡташлыҡ тойғолары нығый, хәтере яңыра, тыуған ергә һөйөүе арта. Былар барыһы ла бай тарихи мираҫыбыҙҙың — донъяла тиңдәше һирәк булған фольклор хазинабыҙҙың хәҙерге заман менән бәйләнешен, бөгөнгө рухи донъябыҙға йоғонтоһон көсәйтә.

Тарихи мираҫыбыҙҙы ҡәҙерләй белеү һәм уны аңларға тырышыу халҡыбыҙҙың әлеге рухи көсөн арттыра, тыуыр көндәргә өмөт-ышаныстарын нығыта. Тарих киләсәккә саҡыра.

"Башкирские исторические предания и легенды" тигән китап менән танышыуым миндә бына шундай уйланыуҙар һәм хәтирәләр тыуҙырҙы.

### Әҙәбиәт


1. Башкирские исторические предания и легенды. Автор-составитель — доктор филологических наук Ф.А.Надршина. — Уфа: изд. "Китап" им. Зайнаб Биишевой, 2015, 526 стр.

2. *Нәҙершина Фәнүзә*. Халыҡ һүҙе. — Өфө, 1983; Халыҡ хәтере. — Өфө, 1986.

3. Башҡорт халыҡ ижады. 18 томда. — Өфө, 1972—1985; Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. — Өфө, 1980.

4. Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. — Өфө, 1980.

5. Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Беренсе китап. Төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Мөхтәр Сәғитов.

6. Башкирия в русской литературе. В 5-ти томах. — Уфа, 1961—1968; В 6-ти томах. — Уфа, 1989—2004.

7. *Игнатьев Р.Г.* Башкир Салават Юлаев, пугачевский бригадир, певец и импровизатор. *Нефедов Ф.Д.* Движение среди башкир перед Пугачевским бунтом. Салават — башкирский батыр. Башкирия в русской литературе в 6-ти томах. Т.2. — Уфа, 1991.

8. Башкирское народное творчество в 12-ти томах. Т.1—12. 1987—2010.

9. Акбузат. — Уфа, 1976. Урал-батыр. — Уфа, 1977.

10. Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре. Башкирские народные песни, песни-предания. Bashkort Folk songs, songs-legends. Автор-составитель Фануза Надршина. — Уфа, 1997. Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары. Башҡорт, рус, инглиз телдәрендә. Төҙөүсеһе Фәнүзә Нәҙершина. — Өфө, 2001. Урал-батыр. На башкирском, русском и английском языках. Проект, вступительная статья, подготовка текстов — Ф.А.Надршина. — Уфа: Информреклама, 2005. Салават в башкирском фольклоре. На башкирском, русском и английском языках. Проект, составление, научное редактирование, вступительная статья и комментарии — доктор филологических наук Ф.А.Надршина. Т.1. 2. — Уфа: Информреклама, 2008.